*Мәхмүт ХУЖИН*

# Хоҡуҡтарын белмәгән халыҡ — хоҡуҡһыҙ халыҡ

«Кеше, уның хоҡуҡтары һәм азатлыҡтары — иң юғары ҡиммәт. Кеше һәм граждандың хоҡуҡтарын һәм азатлыҡтарын таныу, ғәмәлгә ашырыу — дәүләттең бурысы». «Кеше һәм граждандарҙың хоҡуҡтары һәм азатлыҡтары ғәмәлдә закондарҙың мәғәнәһен, йөкмәткеһен һәм ҡулланылышын, закон сығарыу һәм башҡарма, урындағы үҙидара эшмәкәрлеген билдәләй һәм хоҡуҡи суд тарафынан тәьмин ителә». Ватандаштарыбыҙҙың ҡолағы өсөн үтә лә яңғырауыҡлы был положениелар Рәсәй Федерацияһы Конституцияһының 2-се һәм 18-се статьяларынан алынды. Уларҙың ысынбарлыҡҡа ни дәрәжәлә тап килеүе хаҡында йәмғиәттә фекерҙең төрлөсә булыуы тәбиғи. Мәҫәлән, закон сығарыу, башҡарма һәм суд даирәләрендә эшләүселәрҙең яуабы ыңғай, теге йәки был законға һыймаған ҡылығы өсөн хөкөм ителеп, төрмәлә ултырып сыҡҡандарҙың — ҡырҡа кире, фәҡирлектә ғүмер һөрөүсе ватандаштарыбыҙҙың кире буласағы бер ҙә ғәжәп түгел. Шулай ҙа күпселектең яуабы «белмәйем» йәки «әлләсе» кимәленән уҙмаҫ, моғайын. Сөнки батша Рәсәйенән алып, хатта «донъяла иң ғәҙел ҡоролош» һаналған Советтар Союзында ла «кеше хоҡуҡтары» төшөнсәһе ихтирам менән телгә алынманы. Һуңғыһында иһә «буржуаз төшөнсә» тип йөрөтөлдө.

Рәсәй Федерацияһы Конституцияһы ҡабул ителеүгә 20 йыл тулыу айҡанлы өс йыл әүәл уҙғарылған социологик тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, Төп закондың йөкмәткеһе менән таныш граждандар һаны хатта 20 процентҡа ла етмәй. Әлбиттә, СССР кеүек тоталитар дәүләттән, РФ Конституцияһында билдәләнгәнсә, «федератив демократик һәм хоҡуҡи дәүләт»кә саҡлы юл үтеү өсөн сирек быуат ҡына бик аҙ. Айырыуса хоҡуҡи аңды үҫтереү өсөн. Граждандар йәмғиәте дәрәжәһенә күтәрелә алмаған Рәсәй йәмғиәтенә был хатта һауалағы торна кеүек тойола.

Рәсәй граждандары үҙҙәренең сәйәси, мәҙәни хоҡуҡтарын, шул иҫәптән, мәҫәлән, тел хоҡуҡтарын яҡлауҙан йыраҡ тора. Ватандаштарыбыҙҙы дәүләт органдарына, профсоюздарға һәм ахырҙа судтарға мөрәжәғәт итергә хоҡуҡ дауларға ынтылыу түгел, ә йән аҫрауға башҡаса мөмкинлек ҡалмау мәжбүр итә. Фәҡирлек — яңы Рәсәй күренеше һәм уның үҙен ни рәүешле күрһәтеүе тураһында социологтарҙың мәғлүмәттәре менән танышҡандан һуң ауыр кисерештәргә биреләһең. «Фәҡирҙәр үҙен йәмғиәттән ситкә сығарып ташланған кеүек хис итә. Бер ниндәй йөкләмәләрҙе лә танымай. Енәйәтселек

тап ошо мөхиттә үҙенең сафтарын тулыландыра. Параллель донъялар, диаспоралар барлыҡҡа килә. Субкультуралар хәүефле, унда «беҙҙеке» һәм «уларҙыҡы»на бүленеш, милләтселек тойғолары...» Был юлдар «Лента. ру» сайтындағы Социология институтының баш ғилми хеҙмәткәре Татьяна Тихонова менән әңгәмәнән. Унан асыҡланыуынса, ватандаштарыбыҙҙың һәр дүртенсеһе фәҡирлек сигендә көн итә. «Росстат»тың мәғлүмәттәре ысынбарлыҡҡа тап килмәй, ти Тихонова, улар йәшәү минимумынан түбән күрһәткестәрҙе генә иҫәпкә ала. Пенсия йәшендәгеләрҙең күпселеге ғәмәлдә ғүмер һөрөүгә (русса әйткәндә — «на грани выживания») дусар ителгән. Элек фәҡирҙәрҙе ситләтеү күҙәтелмәһә, хәҙер был күренеш көсәйә бара.

Байҙар рәтенә социологтар кемдәрҙе индерә? Әңгәмәлә был һорауға ла яуап бар. Беренселәрҙән Тихонова дәүләт хеҙмәткәрҙәрен, артабан эшҡыуарҙарҙы, эре хосуси компанияларҙа эшләүселәрҙе атай. Икенсе һәм өсөнсө төркөмдәргә инеүселәр менән барыһы ла асыҡ, ә бына тәүге төркөмдәгеләр, ысынлап та, һорау тыуҙыра: уларҙың эш хаҡына бер нисек тә байып булмай. Тимәк, башҡаларҙы «һауалар»... Ошо уҡ сайттағы Социология институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре Светлана Мареееваның аңлатмаһына ҡарағанда, «яңы фәҡирҙәр» төшөнсәһе социологтар тарафынан «яңы байҙар»ға ярашлы индерелә. Юғары белеме һәм һәләте булып та, фәҡирҙәр төркөмөнә юлығыуы менән айырыла улар. Хикмәт шунда — «яңы фәҡирҙәр» һаны арта.

«РБК-Дейли» сайты хәбәр итеүенсә, әленән-әле баш ҡалҡытып торған социаль-иҡтисади кризистар былай ҙа осон-осҡа ялғап көн күргән ҡатламдарҙың түҙемлеген һынай. «Рәсәйҙәрҙең кризисҡа түҙемлеге бер йыл — йыл ярымға етә, артабан күпләп протест белдереүҙәр башланыуы ихтимал», — ти Юғары иҡтисад мәктәбенең Фәнни-тикшеренеү университеты профессоры Наталья Тихонова. Ауылдарҙа хәл айырыуса ҡатмарлы. Халыҡ түҙергә мәжбүр, сөнки барыр урыны юҡ.

Ҡилеме ике йәшәү минимумынан кәм булмағандар 25 проценттан артмай, тип дауам итә Тихонова. Әлегә кешеләр өндәшмәй, сөнки улар, беренсенән, власть һәр саҡ насар, тип уйларға өйрәнгән. Икенсенән, йәмғәт тормошонда әүҙем ҡатнашырға ынтылыш элек-электән булманы. Ғалимә фекеренсә, ваҡ ҡына сәбәптең дә ризаһыҙлыҡтың дөрләп тоҡаныуына килтереүе ихтимал. Мәҫәлән, Ҡырым, Украина, Сириялағы ваҡиғаларҙа Рәсәйҙең ҡатнашын кем көтһөн дә, оло йәштәгеләргә пенсияны индексламаҫтар, тип кем уйлаһын?!

Халыҡта сараһыҙлыҡ тойғоһо көсәйә, тип билдәләнде Левада-үҙәктең уҙған йылғы социологик хеҙмәтенә арналған конференцияла. Ватандаштарыбыҙҙа 90-сы йылдар реформаларында отолоу тойғоһо уяна. Рәсәйҙәрҙең 60 проценты самаһы Рәсәй — цивилизациялы Европа дәүләте түгел, тигән мөнәсәбәт белдерә. Совет сәйәси системаһын юғарыраҡ баһалаған респонденттар күбәйә. Шул уҡ ваҡытта демократияның конституцион өлгөһөнә һәм хәҙерге сәйәси системаға ыңғай ҡараш белдереүселәр кәмей. Әлбиттә, совет өлгөһөнә ыңғай мөнәсәбәт уға ҡайтырға теләүҙе аңлатмай, ә үҙенә күрә власты тәнҡитләү сағылышы булып тора.

## Яңғыҙ ҡарға яҙ килтермәй

Конституцион хоҡуҡтарҙы яҡлауҙа илебеҙҙә 2000-се йылдарҙан бирле махсус хеҙмәт — Кеше хоҡуҡтары буйынса вәкил институты эшләй. Бындай вазифа, федераль үҙәктән тыш, федерация субъекттарының һәр ҡайһыһында булып, улар ике сроктан ашыу эшмәкәрлек итергә лә өлгөрҙө. Вәкилдең хоҡуҡ-бурыстары ниҙән ғибәрәт, уға ниндәй үтенестәр менән мөрәжәғәт итәләр?

Һуңғы йылда Кеше хоҡуҡтары буйынса Рәсәй Федерацияһы вәкиленә мөрәжәғәт итеүселәр 18 процентҡа артҡан. Элек ялыуҙарҙың яртыһы самаһы дәүләт структуралары менән ойошмаларҙан килһә, былтыр 70 проценты — граждандарҙан, тип яҙа «Аргументы недели» аҙналығы. Тимәк, кешеләр хоҡуҡтарын яҡлау йәһәтенән аңлыраҡ була бара. Элеккекеүек, иректән мәхрүм итеү учреждениеларында көс ҡулланыуға зарланыусылар кәмемәй. Һуңғы ике һығымтала бер аҙ ҡаршылыҡ күҙәтелә. Вәкилгә мөрәжәғәт итеүсе граждандар һаны арта икән, был иң әүәл кеше хоҡуҡтарын боҙоу кеүек кире күренештәрҙең көсәйеүе тураһында һөйләй. Аңлылыҡтың был хәл-күренешкә мөнәсәбәте шикле, сөнки хоҡуҡ боҙоусылар артҡан бит. Зарланыусыларҙың кәмемәүен иһә кеше хоҡуҡтары менән иҫәпләшмәү арта, тип ҡабул итергә кәрәк.

Торлаҡ-коммуналь хеҙмәтләндереүгә хаҡтар күтәрелеүе дәүләт корпорациялары һәм монополияларҙың ҡаҙна аҡсаһын «уңлы-һуллы» туҙҙырыуынан килә, тип аңлата Кеше хоҡуҡтары буйынса РФ вәкиле Элла Памфилова. (Мәҡәлә баҫмаға әҙерләнгән осорҙа Э.Памфилова был вазифанан бушатылды. — ***М.Х.***). Һуңынан «тишек-тошоҡтар»ҙы халыҡ иҫәбенә ямарға тотоналар. Граждандарҙың конституцион хоҡуҡтарын яҡлауҙа ниндәйҙер алға китеш урынына киреһе күҙәтелә. Ике йыл элек илдә кеше хоҡуҡтарының үтәлешенә ыңғай һәм кире баһа биреүселәр сама менән бер тигеҙ булһа, былтыр тәүгеләре 36 процентҡаса кәмегән. 2016 йыл социаль-иҡтисади ауырлыҡтарға бәйле тағы ла ҡатмарлыраҡ булып күҙ алдына баҫа, тип фаразлай Памфилова. Социаль өлкәлә торлаҡ фонды туҙыу менән бәйле техноген һәләкәттәр, йылылыҡ селтәрендә авариялар артыуы ихтимал.

Йәмғәтселек фекере фонды, Левада-үҙәк, Г.В.Плеханов исемендәге Рәсәй иҡтисади университеты мәғлүмәттәренә һылтанып, Кеше хоҡуҡтары буйынса РФ вәкиле, хәҙер респонденттарҙың 77 проценты хоҡуҡтарын аныҡ күҙ алдына баҫтыра, тигән көтөлмәгән һығымта яһай.

Иң йыш инҡар ителеүсе хоҡуҡтарҙан тәүге урынды хеҙмәт хоҡуҡтары һәм эш хаҡы түләү биләй — 37 процент. Быны, һис шикһеҙ, крепостной хоҡуҡ әҙемтәһе тип ҡарарға тулы нигеҙ бар. Батша Рәсәйендә крепостной крәҫтиәндәр баярға бушлай көс түгергә мәжбүр ителһә, Советтар ҙа үҙ тарихының тәүге өлөшөндә ауыл халҡын хеҙмәт көнө иҫәбенә бил бөгөргә мәжбүр итә. Тап ошо ғәмәл (Ҡөнбайыш демократияһында ул осрамай) тиҫтәләрсә йылдан һуң совет граждандарының ҡайһы бер вариҫтары тарафынан ғәмәлгә индерелде лә инде. Тик ҡаршы сара күрелмәү генә был вәхшилеккә һаман тантана итергә көс бирә.

Социологик тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашҡан респонденттарҙың 67 проценты үҙенә бәйле булмаған сәбәптәр арҡаһында эшһеҙ ҡалыуҙан ҡурҡа. 47 проценты фекеренсә, Рәсәйҙә эш хаҡы тамаҡ аҫрауға ғына етеп, кейем-һалым, эре тауарҙар һатып алыу оло проблемаға әүерелеү иһә — XXI быуат өсөн ҡырағай күренеш. Эш хаҡы алып та фәҡирлек сигендә көн итеү — сәнәғәт өлкәһендә ре-

формалар үткәрелмәүе хаҡында һөйләй, тигән һығымта яһай Памфилова. Рәсәй — үҙенсәлекле цивилизация, тип баҫым яһап әйтергә яратҡан йәмғиәтебеҙҙең был хәле — ҡабатланмаҫ күренеш. Хеҙмәткә түләүҙә ниндәйҙер аныҡ тәртип юҡ, етәкселәр нисек теләй йәки булдыра ала — шул саҡлы тәғәйенләй. Әйтәйек, водитель йәки һатыусыға юғары белемле уҡытыусы, табип, инженерҙан күберәк түләйҙәр икән, был йәмғиәттең һау-сәләмәтлеге, юридик өлгөргәнлеге шик тыуҙыра. Эш хаҡына реформа үткәреү зарурлығын Рәсәй ғалимдары 90-сы йылдар аҙағында уҡ күтәреп ҡарағайны, әммә ҡолаҡ һалыусы юҡ. Был да ғәжәп түгел, сөнки властар килемде үҙҙәренә етерлек ала бит.

Кеше хоҡуҡтары буйынса РФ вәкиленең докладында билдәләнеүенсә, респонденттарҙың өстән ике өлөшө граждандарҙың күпселеге үҙ хоҡуҡтарын белмәй, ә 74 проценты уларҙы яҡларға һәләтһеҙ, тип иҫәпләй. Һәр өсөнсө респондент, ярҙам һорап, ҡайҙа ла булһа мөрәжәғәт итеүҙән тамам төңөлгән. Рәсәй Президенты Владимир Путин менән осрашыуҙарының береһендә Элла Памфилова хатта, халыҡта власть вәкилдәренең йәмәғәт хоҡуҡтарын яҡларға һәләтлелегенә ышанмаусанлыҡ барлыҡҡа килде, тип әйтергә мәжбүр була. Ошо ваҡиғанан һуң, 2015 йыл башында Кремль Дәүләт думаһы ҡарауына Кеше хоҡуҡтары буйынса вәкилдең эшмәкәрлеген камиллаштырыу тураһында закон проекты индерә. Әҙерләүҙә Элла Памфилова ла ҡатнашҡан был документҡа ярашлы, вәкил һайлап ҡуйыла, ул власть органдарынан бойондороҡһоҙ һәм сәйәси фирҡәләрҙә ағза булып тора алмай. Федерация субъекттарында вәкил урындағы парламент менән килешеп, федераль вәкил тарафынан раҫлана.

Үрҙә аталған ҡырағай күренештәрҙең XXI быуатта ла күҙәтелеүенең сәбәбе нимәлә? «Рәсәйҙә кеше хоҡуҡтары ҡырҡыу бәхәстәр өсөн һылтау булып ҡала, — ти «Граждандар көсө» Бөтә Рәсәй сәйәси фирҡәһенең юғары советы рәйесе Михаил Барщевский. — Бында ғәжәпләнерлек бер ни ҙә юҡ, сөнки был хәл граждандар йәмғиәтенең генә түгел, хоҡуҡи дәүләт статусына дәғүә иткән илдең үҫеш күрһәткесе». Тәү ҡарашҡа РФ Конституцияһында кеше хоҡуҡтары һәм азатлыҡтары нығытылған кеүек, әммә үҙен хеҙмәтләндереүҙән башҡаны танырға теләмәгән дәүләт үҙ халҡына хеҙмәт итергә тейешлеген иҫәпкә алмаҫҡа өйрәнгән. «Беҙҙә кешеләргә түбәнһетеп ҡарауҙы һәр саҡ күҙәтә киләбеҙ, — ти Памфилова ла. — Кеше бәләкәй генә вазифаға ултырһа ла, тирә-яғындағы бер кемде лә күрмәй башлай».

«Беҙ бәхәс ҡорған темалар Көнбайыш цивилизацияһы өсөн — үткән быуат, — тип дауам итә Барщевский. — Беҙ ҡорал туплау, дәүләт сиктәрен нығытыу менән мауыҡҡанда, унда кеше шәхесе һәм хоҡуҡтары тураһында хәстәрлек күрәләр. Көнбайышта граждандар үҙҙәре хәл иткән мәсьәләләрҙе ватандаштарыбыҙ дәүләт елкәһенә һала», — тигән ғәйепләү ташлай сәйәсмән, был хәл-күренештең тәбиғәте тураһында баш ватып ҡарамай ғына. Ирекһеҙҙән урыҫ тарихсыһы Василий Ключевскийҙың түбәндәге һүҙҙәре иҫкә төшә: «Ят Көнбайыш аҡылына беҙ үҙ аҡылыбыҙ менән йәшәргә өйрәнеү өсөн мөрәжәғәт итеп ҡарағайныҡ, әммә беҙ үҙебеҙҙекен уның менән алмаштырырға маташтыҡ». Ысынлап та, феодаль тәртиптәрҙән XVII быуатта уҡ арынған инглиздәр менән XVIII быуатта уҡ республика ҡоролошо урынлаштырған французлдарса көн итергә йәмғиәтебеҙҙең ҡулынан килеүе мөмкинме һуң?

МДУ профессоры Дмитрий Ольшанскийҙың «Независимая газета»ла донъя күргән «Состояние умов при ветреной погоде» тигән әңгәмәһендәге фекере иғтибарға лайыҡ. «Рәсәйҙәрҙең холҡондағы үҙенсәлек бала психологияһына тулыһынса тап килә, — ти ғалим. — Был эске тойғоларға бай, әммә буталсыҡ тормош. Үҙ-үҙеңде тыйып тота алмау, әйткән һүҙҙә тора белмәү шунан килә. Бәләкәйҙәр аяуһыҙ була, ауыртыуҙың ни икәнен белмәй, тормошто баһаларға һәләте юҡ. Беҙҙең бала саҡ бик оҙаҡҡа һуҙылды, һаман өлкәнәйә алмайбыҙ. Ижтимағи аңдағы күп етешһеҙлектәр — сәбәпте эҙемтә менән бәйләй алмауҙан. Ваҡыт, үҙгәрештәр динамикаһын тойоу етмәй». Ғалим фекеренсә, Рәсәй элекке колониаль биләмәләрҙе ҡулда тотоу, бер ҡарышын да бирмәү менән мәшғүл. Ғәмәлдә социаль институттар юҡ, Дәүләт думаһы тәрбиәсеһе ситкә киткән балалар баҡсаһын хәтерләтә. Һәр кем, теленә ни килә, парламент трибунаһынан шуны ҡысҡыра.

Барщевскийса, беҙгә үҙ тормошобоҙҙо үҙебеҙгә хәстәрләргә һәм уның өсөн яуаплы булырға ваҡыт. Дәүләттең кеше тормошона ҡыҫылыуы — законһыҙ, беҙгә Көнбайыш тәжрибәһен файҙаланырға, хоҡуҡтарҙы яҡлау буйынса эшлекле аппарат булдырырға кәрәк. Хоҡуҡ белгесе, күрәһең, сираттағы бюрократик өҫҡорманың граждандар институттары булмаған йәмғиәттә бер ни ҙә ҡыра алмаясағы хаҡында уйланмаған.

Һанап үтелгән етешһеҙлектәр һәр ҡайһыбыҙға ла яҡшы билдәле. Ләкин уларҙың нигеҙен тәшкил иткән объектив сәбәптәрҙе лә иҫәпкә алырға кәрәк. Советтар Союзы халҡы Икенсе донъя һуғышы килтергән ҡот осҡос юғалтыуҙарҙан үҙ көсө менән арынғанда, АҠШ-тың аҡсалата һәм башҡа төрлө ярҙамында Көнбайыш дәүләттәре социаль-иҡтисади хәлде тиҙ арала яйға һалып, көнкүрешен юғары дәрәжәлә ҡорорға өлгөрҙө. Әлбиттә, граждандар йәмғиәтенең әүҙем ҡатнашлығында. «Партия һәм совет власының атайҙарса хәстәрлеге»нә күнеккән СССР-ҙа был хаҡта һүҙҙең булыуы ла мөмкин түгел ине. «Инициатива наказуема», ти бит урыҫ. Урындағы үҙидара тураһында закон ҡабул ителеүгә тиҫтә йылдар үтеп тә бер ниндәй алға китеш булмау — шуның бер миҫалы. Ни өсөн икәнлеге — айырым мәсьәлә.

Атап үтелгән проблемаларҙы бер епкә теҙгән күренеш — йәмғиәттә хоҡуҡи культураның түбәнлеген хоҡуҡ яҡлаусыларҙың барыһы ла тиерлек билдәләй. Нимә һуң ул хоҡуҡи культура? «Ғәмәлдәге юридик өҫҡорманың күп яҡлы йыйылмаһы, хоҡуҡ, уның ғәмәле, дәүләт органдары һәм вазифалы граждандарҙың эшмәкәрлеге хаҡында теге йәки был йәмғиәттең ҡараштар комплексы, — 2006 йылда Мәскәүҙә нәшер ителгән «Теория государства и права» дәреслегендә уға шундай фәнни билдәләмә бирелә. — Хоҡуҡи культура хоҡуҡи фекерләүҙең, хоҡуҡи ысынбарлыҡты тоя белеүҙең, хоҡуҡ ижад итеү процестарының сифатын, эштәрҙе судта һәм административ тәртиптә ҡарауҙың, хоҡуҡ тәртибе һәм законлылыҡтың юғары кимәлен аңлата. Хоҡуҡ культураһы ябай граждандарҙың ғына түгел, юғары вазифалы етәкселәрҙең дә үҙ бурыстарына аңлы һәм яуаплы мөнәсәбәтенән башҡа күҙ алдына баҫтырылмай».

Был академик телдә яҙылған билдәләмәне аңлау, әлбиттә, ауыр. Шулай ҙа уның һуңғы һөйләмендә акценттар дөрөҫ ҡуйылмаған булһа кәрәк. «Ябай граждандар» менән «вазифалыларҙың» урындарын алмаштырыу ысынбарлыҡҡа тулыраҡ тап килер ине. Сөнки хоҡуҡтар конституцион бурыстарын үтәргә бурыслы вазифалар тарафынан йышыраҡ боҙолоусан. Был — бер. Икенсенән, хоҡуҡ культураһының кимәле лә ниндәйҙер дәрәжәлә вазифа биләүселәр эшмәкәрлегенә бәйле.

Аталған китапта шулай уҡ «хоҡуҡи нигилизм»ға ла билдәләмә бирелеп, уға миҫалдар ҙа урын алған. Был төшөнсә хоҡуҡи йәмғиәттең ойошоу формаларына кире мөнәсәбәтте аңлата. Енәйәт ҡылыу, хоҡуҡ боҙоу, хоҡуҡтан шәхси маҡсаттарҙа файҙаланыу, юридик талаптарҙы инҡар итеү, закондарҙы боҙоуҙан ғибәрәт. 1990 йылда илебеҙҙә 1,8 миллион самаһы енәйәт теркәлһә, быуат аҙағында ул 3 миллиондан ашып китә һәм яртыһы тиерлек кеше милкенә законһыҙ хужа булырға ынтылыуға тура килә. 90-сы йылдарҙа хөкөм ителеүселәр 537,5 меңдән 1,1 миллионға тиклем арта. Милеккә ҡаршы енәйәт өсөн 711,5 мең, кеше үлтергән өсөн — 9 мең, аңлы рәүештә ауыр тән йәрәхәте яһаған өсөн — 15,6 мең, көсләгән өсөн 4,8 мең, хулиганлыҡ өсөн 38 мең кеше хөкөм ителә. 2000 йылда ирektән мәхрүм итеү урындарында 1 миллиондан күберәк, тәфтиш изоляторҙарында 281 мең кеше ултыра. Заказлы хөкөм, заказлы тикшереүҙәр киң ҡолас ала. Хоҡуҡтан самаһыҙ файҙаланыу хоҡуҡ эшмәкәрлегенең барлыҡ өлкәләренә лә үтеп инә.

Кеше хоҡуҡтары буйынса вәкил, яңғыҙ ҡарға яҙ килтермәгәндәй, үрҙә телгә алынған һандар солғанышында бер үҙе ни генә ҡыла ала? Рәсәйҙең тәүге омбудсмены Владимир Лукиндың «Российская газета»ға интервьюһында («Легко ли быть адвокатом общества?») был йәһәттән бер ни тиклем мәғлүмәт бар. «Миңә социаль мәсьәләләр, хоҡуҡ һаҡлау органдарының башбаштаҡлығы, судтарҙың ғәҙелһеҙлеге, төрмә һәм колонияларҙағы ҡот осҡос көнкүреш менән шөғөлләнергә тура килде, — ти Лукин. — Мин тыуған илемде яҡшыраҡ белдем». Шуны ла иҫкә төшөрөп үтәйек: Владимир Петрович «Яблоко» сәйәси фирҡәһенә нигеҙ һалыусыларҙың береһе булып, хәҙер унда Григорий Явлинский яңғыҙы ғына ҡалды, булһа кәрәк. «Кеше хоҡуҡтарын яҡлау ерлегендә мин тупраҡты ҡулымдан килгәнсә йомшартырға тырыштым, — тип дауам итә Лукин, — әммә ул минең артымса уҡ тығыҙлана барҙы. Эйе, мин барыһын да эшләй алманым, ләкин тамсы ла ташты тишә бит».

Вазифаға ул Рәсәй Президенты тарафынан саҡырыла һәм унан үҙенең яңы эшмәкәрлегенә тығылмаҫҡа һүҙ ала. Лукин фекеренсә, омбудсмен — власҡа ҡаршылар башында тороусы түгел, — ғөмүмән, уға сәйәсәт менән шөғөлләнеү тыйыла. Кеше хоҡуҡтары буйынса вәкил президентҡа теге йәки был дәүләт органында, теге йәки был вазифа эйәһенең кеше хоҡуҡтарын боҙоуы тураһында бер ниндәй хис-тойғоһоҙ, мөмкин тиклем тыныс тауыш менән еткерергә бурыслы. «Эйе, һүҙгә килергә мөмкин, тик унан бер файҙа ла булмаясаҡ, — ти элекке омбудсмен, — кеше хоҡуҡтары буйынса ҡарарҙарҙы барыбер властар ҡабул итә».

Ысынлап та, йәмғиәтебеҙҙең ихтыяждары көнкүрештән ары китмәй. Нисек ғаиләнең тамағын туйҙырырға, аҙ-маҙ эш хаҡын нисек осон-осҡа ялғарға? Ә инде көндәлек ихтыяждар ҡәнәғәтләндерелә икән, кешенең сәйәси офоҡтары киңәйә, юғары материя тураһында уйлана башлай. Сит илдәрҙә кешеләр бер-береһенә яһалма дуҫлыҡ мөнәсәбәте күрһәтһә, беҙ — эскерһеҙ күрә алмаусанлыҡ күрһәтәбеҙ, — ти Лукин, был хәбәренә тәрән мәғәнә һалып. Хәбәрсенең: «Күп ҡатлы ятаҡтың бер мөйөшөн биләп эшләү властарҙың был институтҡа мөнәсәбәтен аңлатмаймы?» — тигән кинәйәле һорауына элекке омбудсмен: «Был хаҡта мин бер һүҙ ҙә әйтмәнем», — тип тура яуаптан ҡаса һымаҡ, ләкин шуның менән тәжрибәле сәйәсмән журналистың һорауы менән килешеүенә ишара итә...

## Ауыр мираҫ

Телгә алынған хоҡуҡтарҙың барыһы ла «Кеше хоҡуҡтарының дөйөм декларацияһы»нан һүҙмә-һүҙ тиерлек күсереп алынған РФ Конституцияһында нығытылған. Бер нисәһен иҫкә төшөрөп үтәйек. «Закон һәм суд алдында барыһы ла тиң хоҡуҡлы» (19-сы статья), «Бер кем дә язалауға, көс ҡулланыуға, башҡа төрлө кеше дәрәжәһен мыҫҡыллауға дусар ителә алмай» (21-се), «Фекер һәм һүҙ азатлығы һәр кемгә гарантиялана» (29-сы), «Һәр кем хеҙмәт өсөн түләүгә хоҡуҡлы» (37-се), «Һәр кемгә йәше... буйынса социаль тәьминәт гарантиялана» (39-сы), «Һәр кем торлаҡҡа хоҡуҡлы» (40-сы), «Хоҡуҡ һәм азатлыҡтарҙы суд яҡлауы һәр кемгә гарантиялана» (46-сы) һ.б. Күренеүенсә, Төп закон ожмах ҡына вәғәҙә итмәй. Тик ни өсөн уның положениелары боҙола һуң?

Хоҡуҡ белгестәренең күпселеге «ҡоро декларацияларға ҡоролған» тип баһалаған РФ Конституцияһы йөкмәткеһе өҫтөндә эшләүселәрҙең береһе, юридик фәндәр докторы Сергей Шахрай өс йыл элек «Парламентская газета»ла донъя күргән мәҡәләһендә был һорауға бер ни тиклем яуап ҡайтарҙы. Төп закон илдәге сәйәси конфликт шарттарында яҙылды, ти ул. Йәмғиәттә килешеүгә өлгәшеп булмағас, уны ижтимағи тәртип урынлаштырыуға стимул булдырған, йәмғиәтте ярашыуға өндәгән документ итеп эшләргә тура килде. Күрәһең, Көнбайыш демократияһын Рәсәйҙә лә урынлаштырырға мөмкин, тигән идеянан башы әйләнгән авторҙар күп йәһәттән яһалма, ваҡытлыса документтың беҙҙәге шарттарға тап килмәҫе менән иҫәпләшеп тормаған.

«Кеше хоҡуҡтарын юғары ҡиммәт итеп таныу, сәйәси тотороҡлолоҡ һәм илдең бөтөнлөгө, дәүләттең социаль йүнәлешлелеге, властарҙың һәм урындағы үҙидараның һайланып ҡуйылыуы, бөтә халыҡтарҙың телдәренә, мәҙәниәтенә һәм традицияларына ихтирам — быларҙың барыһы ла демократтар араһында ла, коммунистарҙа ла бәхәс тыуҙырмай», — тип һанап китә автор. Әлбиттә, тик бөгөн был положениеларҙың береһе лә йүнләп эшләмәүе менән нисек булырға? Һауалағы торнаға өмөтләнеп, ҡулыңдағы турғайҙы ысҡындырма, тигән башҡорт. Ғәмәлдә, турғай юҡ, ә торнаға иһә үрелеп буй еткеһеҙ.

«РФ Конституцияһы ҡоро декларацияларға ҡоролған», тигән фекерҙе дәлилләп, бер нисә миҫал килтереп китәйек. РФ Конституцияһының 33-сө статьяһына ярашлы, «РФ граждандары дәүләт һәм урындағы үҙидара органдарына шәхсән һәм коллектив исеменән мөрәжәғәт итергә хоҡуҡлы». Власть йөрөтөүсе күп милләтле халыҡ вәкиле булараҡ, бындай хоҡуҡ бирелеү аңлашыла, тик Төп законда ни өсөндөр уларҙың үҙ мөрәжәғәтенә яуап алырға хоҡуғы, ә органдарҙың яуап бирергә ҡәтғи бурыслылығы тураһында бер ни ҙә әйтелмәй. Ә бит шунһыҙ был положениеның бер ниндәй ҙә әһәмиәте юҡ. 37-се статьяның 2-се пункты мәжбүри эшләтеүҙе тыя. Әммә мәжбүри эшләтеүҙең законһыҙ күренеш булыуын күрһәтмәй, һөҙөмтәлә Административ хоҡуҡ боҙоуҙар буйынса кодексҡа ярашлы, ундай ғәмәл ҡулланыла.

Ошондайыраҡ фекерҙе 39-сы статьяның 2-се пунктындағы «дәүләт пенсиялары һәм пособиелар закон тарафынан билдәләнә» тигән, 40-сы статьяның торлаҡҡа хоҡуҡ тураһындағы, 57-се статьяның һалым түләүгә ҡарата положениелары буйынса ла әйтергә мөмкин. Быларына аңлатма биреп тороу ҙа кәрәкмәй,

күрһәтелгән статьяларҙың ғәмәлдә үтәлмәүе, уларҙы ғәмәлгә ашырыу механизмы булмауы һәр кемгә мәғлүм.

Быңдай түбәнселекле һәм күңелһеҙ тарихтың тәбиғәтен үҙ аллы асыҡлап ҡарайыҡ. 2001 йылда «Литературная газета»ла донъя күргән «Россию истощает имперский вирус» тип аталған мәҡәләһендә Рәсәй Фәндәр академияһының Иҡтисад институты баш ғилми хеҙмәткәре Геннадий Лисичкин былай тип яҙҙы: «Рәсәй етди ауырый. 1917 йылдан ғына түгел һәм бында большевиктарҙы ғына ғәйепләү нигеҙһеҙ булыр ине. Большевиктар быуаттар буйы Рәсәй йәмғиәтенең һаулығын емергән процестарҙы көсәйтте һәм яңы шарттарға яраҡлаштырып дауам иттерҙе генә». Автор фекеренсә, империя — территориаль төшөнсә генә түгел, идея ла. Батша империяһы башҡа диндән булған халыҡтар менән ҡан ҡойғос һуғыштар алып барып, үҙенең баҫҡынсылығын донъяла «дөрөҫ дин» — православие таратыуы менән аҡларға маташты. Большевиктар иһә «дөрөҫ тәғлимәт» — коммунизм идеяһын көсләп тағырға ынтылды. Һоҡланғыс инглиз тарихсыһы Артур Тойнби юҡҡа ғына, үҙ мираҫынан еңел генә ҡотолоп булмай, ул саҡ ҡына үҙгәреш кисергән хәлдә яңынан әйләнеп килеүсән, тип яҙып ҡалдырмаған.

Дәлил тосораҡ булһын өсөн, тағы ла бер фән эйәһенең фекеренә мөрәжәғәт итәйек. Философия фәндәре докторы, мәҙәниәтсе Герман Андреев бынан 15 йыл әүәл «Общая газета» редакцияһында уҙғарылған түңәрәк өҫтәлдә «империя» төшөнсәһенә шундай билдәләмә бирә: «СССР өс иҫерек сәйәсмән тарафынан түгел, ә империяларҙы тарҡатҡан эске сәбәптәрҙән юҡҡа сыҡты. Империя — бер үҙәктән идара ителеүсе, буйһондоролған күп милләтттәр тупланмаһы. Ул — һәр ваҡыт империяның күп милләтле структураһы өҫтөнән хакимлыҡ итеүсе синыф йәки ҡатлам власы. Рәсәй империяһы һәм Советтар Союзы был билдәләмәгә тулыһынса тап килә ине». «Горбачев фонды» үҙәге етәксеһе Ольга Здравомыслова ла ошо фекерҙе ҡеүәтләй. Йәмғиәтебеҙҙә власҡа ҡарата бөтөнләй аңлайышһыҙ мөнәсәбәт йәшәй. Ул илдә оҙаҡ йылдар хөкөм һөргән империясыл йөкмәтке, империясыл формаға бәйле. Яңы быуат башында «Версты» гәзитендә Рәсәй интеллигенцияһы конгресы рәйесе Сергей Филатов был ҡабатланмаҫ хәл-күренешкә анығыраҡ баһа бирҙе: «Беҙ ирешелгәндәрҙе еңел генә емереп ташлайбыҙ, элекке власть ҡабул иткән ҡарарҙарҙың ни өсөн үтәлмәүен анализлап та тормайынса, һәр саҡ яңы эш башлайбыҙ. Бөтәһен дә булдыра алған кешене тәьмин иткән һәм яҡлаған көслө дәүләт хаҡына кеше хоҡуҡтары һәм азатлығы кеүек конституцион бурыс икенсе планға күсерелә. Илдә барған процестарға битарафлыҡ һаҡлайбыҙ икән, тимәк, беҙҙә теләһә ҡайһы кимәлдәге властан ҡурҡыу күңелебеҙгә шырау кеүек тәрәнгә инеп ултырған».

Үҙ хәлебеҙҙе аңларға һәләтлеме һуң беҙ? Әлеге хоҡуҡи аң кимәлендә быны эшләп буламы? Социология менән ҡырҡ йылдан ашыу шөғөлләнгән Борис Грушин яңы быуат башында «Независимая газета»ла был турала, «Рәсәйҙәге ауырыу аңды өйрәнеү өсөн яңы технологиялар һәм яңы алымдар кәрәк», тигән фекер еткерҙе. Ошо йәһәттән байтаҡ йылдар Көнбайышта йәшәп алған һуғыш ветераны, күренекле философ Александр Зиновьевтың хеҙмәтенә мөрәжәғәт итеү урынлы: «Милли урыҫ идеяһын эҙләү башланды, — тип яҙа ул шул уҡ баҫмала. — Урыҫ халҡы һәм уның тарихы ҡабартып күрһәтелә. Ғәмәлдәге сифаттары: ойо-

шоу кимәленең, милли теләктәшлектең түбәнлеге, властар алдында күндәмлеге иҫәпкә алынмай, яһалма ватансылыҡ идеяһы көсләп тағыла. Рәсәйҙәге яһалма ватансылыҡты спектакль итеп кенә күрһәтергә мөмкин, сөнки бында уның социаль үҫештең мөһим факторы булыу өсөн шарттар юҡ».

Мәскәүҙәге «Аргумент» адвокаттар бюроһы директоры Анатолий Кучерена мәсьәләнең юридик яғына әһәмиәт бирә: «Хоҡуҡи дәүләткә юл, әгәр беҙ уға баҫа ҡалһаҡ, бик ауыр буласаҡ, — ти ул. — Башҡалар менән бер рәттән мине кешеләрҙең төңөлгәнлеге, башланғыстарға һәләтһеҙлеге, үҙ көсөнә ышанмауы, хоҡуҡтарын яҡларға ынтылмауы борсой. Үҙ хоҡуҡтарыңды яҡларға ынтылыу беҙҙә әүәлдән енәйәткә тиңләнә».

Ситтән яҡшыраҡ күренә, тиҙәр. Францияла йәшәүсе кенәз Алексей Оболенскийҙың түбәндәге фекере, моғайын, державасылыҡ идеяһын онота алмағандар өсөн фәһемле дәлил булыр: «Миңә ҡалһа, Рәсәй бөйөк державасылыҡҡа дәғүә итә алмай. Нестор үҙенең йылъяҙмаларында әйтеп үткәнсә, илдә тәртип әле лә юҡ. Тәүҙә Рәсәйҙә тәртип булдырырға, унан һуң ғына «бөйөк», «юғары» державасылыҡ тураһында һүҙ сурытырға мөмкин».

«Рәсәй ижтимағи аңын «граждандарса аң» тип атау ысынбарлыҡҡа тап килмәй, — ти Рәсәй Фәндәр академияһының Донъя иҡтисады һәм халыҡ-ара мөнәсәбәттәр институты баш ғилми хеҙмәткәре, тарих фәндәре докторы Кирилл Холодковский. — Был талапҡа ватандаштарыбыҙҙың 30 проценты ғына яуап бирә. Рәсәй аңына урыҫ ерҙәрен киңәйтеү (йәғни колонизаторлыҡ. — ***М.Х.***) кеүек географик фактор йоғонто яһай. Биләмәләрҙе ҡулда тотоу өсөн Рәсәй көскә баҫым яһай. Хикмәт, бәлки, милли һыҙаттарҙалыр? Петр реформалары һөҙөмтәһендә йәмғиәт социаль-мәҙәни йәһәттән икегә бүленә: Көнбайышҡа ҡараған йоҡа ҡатлам һәм традицион күпселек барлыҡҡа килә. Ошо бүленеш артабан Рәсәйҙең бөтә тарихы буйлап ҡыҙыл еп булып үтә. Хатта совет власы ла уны бөтөрә алмай, ҡайһылыр йүнәлештәрҙә көсәйтә төшә. Традицион тип — патернализм, йәғни власть эйәләренә өмөтләнеү. Артабан — битарафлыҡ, яттарға екһенеп ҡарау. Дөрөҫ, 90-сы йылдарҙа йәмғиәтебеҙ ниндәйҙер дәрәжәлә Көнбайыш ҡиммәттәрен дә ҡабул итә ине кеүек, ләкин тораraҡ барыбер традицион — Көнбайышҡа ҡаршы кәйефтәр өҫтөнлөк алды.

Рәсәйҙә демократик азатлыҡ бер ниндәй сиге булмаған төшөнсә рәүешендә ҡабул ителә. Көнбайышта, киреһенсә, уның сиктәре генә түгел, хатта яуаплылығы бурыстары ла бар. Индивидуализм унда башҡалар мәнфәғәтен дә иҫәпкә алһа, Рәсәйҙә фәҡәт үҙ нәфсеңде ҡәнәғәтләндерергә ынтылышҡа әүерелә».

Рәсәйҙәге тотороҡлолоҡ нимә менән үлсәнә, тигән һорауға Социология институтының социаль-сәйәси системаларҙы сағыштырып өйрәнеү бүлеге баш ғилми хеҙмәткәре Алексей Давыдов түбәндәгесә яуап бирә: «Тотороҡлолоҡ граждանлыҡ нигеҙендә икән — ул үҙе бер тип, империясыл авторитар нигеҙҙә икән — ул бөтөнләй икенсе төшөнсә». Социологик тикшеренеүҙәргә ҡарағанда, күпселек үҙ ҡиммәттәрен яҡларға әҙер түгел, ә протест белдерергә һәләтлеләр тағы ла аҙыраҡ. Матбуғат саралары ла йәмғиәтте бөтәһен дә битараф ҡабул итергә өндәй.

«Рәсәй көслө империя булмайынса йәшәй алмай, — тигән фекере менән ошо уҡ институттың социаль-сәйәси процестарҙы анализлау бүлеге етәксеһе Юрий

Красин таң ҡалдыра. — Эйе, дәүләтебеҙ насар, әммә уға алмаш булырҙайы тағы ла хәүефлерәк. Рәсәй йәмғиәтенең һәләкәте дәүләтселектең эволюцион үҙгәреше һөҙөмтәһендә генә иҫкәртелә ала. Рәсәй тарҡалыуға табан бара, башҡа юл юҡ», — ти фән әһеле.

Йәмғиәтебеҙгә хас күрә алмаусанлыҡ ҡиммәттәр һәм нормалар бушлығынан килә, ти Рәсәй Фәндәр академияһының Психология институты хеҙмәткәре Ольга Маховская. Социаль психолог Дюркгейм уны «аномия» тип атай. Иҫкергән институттар, нормалар емерелгән, яңылары барлыҡҡа килмәгән осорҙа шулай була. Ғалимә фекеренсә, яңы ҡиммәттәр тамырланһын өсөн йәмғиәттең тупланыуы, киләсәккә өмөтлө ҡараш булдырыу кәрәк. Ни рәүешле? Үкенескә ҡаршы, Маховская яҙмаларында ла был һорауға яуап юҡ.

Кеше хоҡуҡтары төшөнсәһе, монархияны ҡолатып, республика идараһы урынлаштырыу, властарҙы бүлеү кеүек оҙон үҫеш юлы үтеп, иң элек Европала нығынған. Әле Рәсәйҙә абсолют монархия хөкөм һөргәндә, XVII быуат аҙағында йәшәгән француз хоҡуҡ белгесе, сәйәси философ Шарль Луи Монтескье закон сығарыу, башҡарма һәм суд властарын бүлеү теорияһын ижад итә. «Властан шәхси маҡсаттарҙа файҙаланыу мөмкинлеген бөтөрөү өсөн төрлө властарҙың бер-береһен тотҡарларға һәләтле тәртибен индерергә кәрәк. Сәйәси азатлыҡ именлекте, һәр хәлдә имен-аманлығыбыҙға ышаныуыбыҙҙы аңлата», — ти Монтескье.

Ә инглиз философы, социолог Герберт Спенсер иһә Монтескьенан да уҙҙырып ебәрә. «Кеше хоҡуҡтары дәүләт тарафынан бирелмәй. Закон — хоҡуҡ сығанағы түгел, ә хоҡуҡ үҙе закон нигеҙе», — тигән һығымтаһы менән Спенсерҙың ниндәй кимәлдә фекер йөрөтөүен бер аҙ күҙалларға мөмкин. Ғалим дәүләт власын кешенең тартып алғыһыҙ хоҡуҡтары менән сикләү яғында. Уның, ғәҙел булмаған хөкүмәт үҙ тормошонда ғәҙел булмаған халыҡҡа таянып ҡына йәшәй ала, тигән һығымтаһы хәҙерге Рәсәй йәмғиәте өсөн әле лә актуаль.

Ижтимағи фекер, әлбиттә, батша Рәсәйендә лә йоҡлап ятмаған. Батша деспотияһына беренселәрҙән булып кенәз Андрей Курбский ҡаршы сыға, хөкөм ғәмәленең башбаштаҡлыҡҡа ҡоролоуын тәнҡитләй. XVIII быуат аҙағында Александр Радищев федератив мөнәсәбәттәр, демократик республика идеяһын күтәреп сыға. Быға тик революцион юл менән генә өлгәшергә мөмкин, ти ул. Хоҡуҡ белгесе, философ һәм социолог Павел Новгородцев (XIX быуат) кеше шәхесенең һәр кем тарафынан һәр ерҙә ихтирам ителергә тейешлеге, көсһөҙ һәм яҡлаусыларһыҙ ҡалғандарға ярҙам итеү принцибын күтәрә.

Социолог һәм хоҡуҡ белгесе Богдан Кистяковский (1868—1920), кеше хоҡуҡтары тыумыштан килә, ә дәүләт тарафынан бирелмәй, тип, Рәсәй йәмәғәтселеге өсөн көтөлмәгән асыш яһай. Дәүләттең хоҡуҡтар боҙолоуға юл ҡуймаҫҡа тейешлеген әйтә. Уның: «Шәхес хоҡуҡтары урыҫ зыялылары мәҙәниәтенең бер өлөшөнә әүерелмәй, урыҫ зыялылары шәхес хоҡуғы идеалын эшләмәй, һәм ул идеал халыҡ тормошо ҡаҙаныштарына әйләнмәй. Хоҡуҡ идеялары Рәсәйҙә, Көнбайыштағы кеүек, әҙәбиәттә урын тапмай», — тигән фекере батша Рәсәйендә был өлкәлә ижтимағи аңдың ысынлап та артта ҡалыуына ишаралай. Хоҡуҡ идеялары өлкәһендәге ҡаршылыҡ Рәсәйҙе Көнбайышҡа ҡаршы ҡуя. Был ҡаршы тороу әлегәсә дауам итеп, XXI быуатта хатта яңынан көсәйә башланы. Бының сәбәбе — әүәлгесә Рәсәйҙең хоҡуҡ идеялары үҫешенә ҡаршы

тороуында. Был ҡаршы тороу Европаны бихисап күп фажиғәләргә, ике донъя һуғышына килтерҙе.

Самодержавие кеүек һөрһөгән институтҡа реформа үткәреү авторҙарының береһе Михаил Сперанскийҙың исеме һәм хеҙмәттәре хоҡуҡ белгестәренә яҡшы таныш. Сәйәси азатлыҡ урынлаштырмай тороп, бер ниндәй ҙә граждандар азатлығы мөмкин түгел, тигән үтә ҡыйыу фекерҙе Сперанский ике быуат элек яҙып ҡалдыра. «Рәсәйҙә ике синыф бар, — ти ул, — батша ҡолдары һәм ер биләүселәр ҡолдары. Уларҙың тәүгеләре икенселәренә ҡарата ғына ирекле күренә, сөнки Рәсәйҙә, берәҙәктәр һәм философтарҙан башҡа, ысынысындан ирекле кешеләр юҡ». Сперанский Рәсәйҙә конституцион монархия урынлаштырырға һәм уның нигеҙендә властарҙы бүлеү принцибы үткәрергә тәҡдим иткән. Реформатор закон сығарыу власын иң юғары власть органы иҫәпләгән. Башҡарма власть — хөкөм йөрөтөүсе сенат, суд власы — суд сенаты. Ғалимдың үткер һәм заманы өсөн ҡыйыу идеялары быуат ярым уҙғас ҡына ғәмәлгә аша — Дәүләт думаһы эшләй башлай.

## Һыйырға эйәр һалмайҙар

Ошондай фекер эйәләре булып та, ни өсөн Рәсәй һаман да хоҡуҡ идеялары үҫешенә ҡаршы тора? Бәлки, хикмәт Рәсәйҙә Конституцияның 1-се статьяһында нығытылған «Рәсәй Федерацияһы — идара итеүҙең республика формаһына нигеҙләнгән федератив демократик хоҡуҡи дәүләт» тигән положениены дөрөҫ аңламауҙа, етди ҡабул итмәүҙәлер? Хәҙерге Рәсәй етәкселеге был хаҡта уйланмай. Проблема власть башында кем тороуҙа ла түгел. Рәсәйҙең проблемаһы илдә демократияға бер ниндәй мөнәсәбәте булмаған ҡағыҙәләр, хатта, Рәсәйҙең — үҙ юлы, тигән фекерләү рәүеше нығытылыуында.

Ғәҙеллек хаҡына шуны ла әйтеп үтергә кәрәк: быйыл Дәүләт думаһына һайлауҙар менән бәйле ижтимағи фекер әүҙемләшә, иҫ китерлек үк булмаһа ла, ҡыйыу ғыналары ла ишетелеп ҡала. Мәҫәлән, Кеше хоҡуҡтары буйынса РФ Президенты ҡарамағындағы совет башҡарма власть формалаштырыуға һәм уның дәүләт ҡаҙнаһын тотоноуына контролде көсәйтмәксе. Инициатив төркөмдәге Илья Шабалин, Елена Лукьянова һәм Михаил Краснов фекеренсә, һуңғы егерме йылда эшләп килгән президент идараһы илдә авторитар режим урынлашыуға килтерҙе. Депутаттар шулай уҡ Федерация советы ағзаларын һайлап ҡуйыу мәсьәләһен дә күтәрә. «Президент һәм парламент хоҡуҡтарын көйләүсе нормалар ғәмәлдә властарҙы бүлеү принцибының боҙолоуына килтерҙе, — ти Шабалин. — Был хәүефле күренештең артабан бик насар эҙемтәләргә килтереү ихтималлығы бар. Конституцияға индергән үҙгәрештәр ғәмәлдә шәхси власть режимын көсәйтеүҙе хәстәрләне». Көсәйә барған социаль-иҡтисади кризис күп нәмәләргә яңыса ҡарарға мәжбүр итә, ти инициатив төркөм ағзалары. Хоҡуҡ яҡлаусыларҙың был тәҡдимен Думалағы КПРФ фракцияһы яҡлап сыҡты. Юридик хеҙмәт етәксеһе Вадим Соловьев: «Думаның илдәге процестарға бер ниндәй йоғонтоһо юҡ, беҙ президент хакимиәтенән килгән закон проекттары өсөн тауыш биреүҙән ары китә алмайбыҙ», — тип белдерҙе.

Был проблема буйынса ҡырҡыу, принципиаль фекерҙәр ҙә бар. «Дәүләт иң элек иҡтисад менән түгел, ә илде упҡынға ҡолатыусы тәү фактор булараҡ үҙ-

үҙе менән шөғөлләнергә бурыслы, — тип яҙа Идеологик процестарҙы өйрәнеү үҙәге етәксеһе Александр Рубцов «Ведомости» гәзитендә. — Был юлы рух күтәренкелеге аша ғына ҡотолоп булмаясаҡ. Балластан арыныу өсөн институциональ реформалар кәрәк. Ә төп балластың теләһә ҡайһы эшмәкәрлекте инҡар иткән, рентаны бүлеүҙән башҡаны белмәгән самаһыҙ ҙур һәм эшлекһеҙ дәүләт аппараты икәнлеге күренеп тора».

Һыйырға эйәр һалмайҙар, тигән әйтем был хәлгә тулыһынса тап килә, сөнки уҙған быуаттың тәүге сирегендә тиңдәшһеҙ тетрәнеүгә дусар ителеп, социализм төҙөү юлына баҫҡан йәмғиәтте бер кеше ғүмеренә тиң дәүерҙә яңынан капиталистик ҡоролошҡа сумдырғандан һуң Көнбайыш цивилизацияһы күҙ уңында тотҡан кеше хоҡуҡтары тураһында һүҙ алып барыу аҡылға һыя торған күренеш була алмай. Бындай хәлдең тик Рәсәйҙә генә булыуы ихтимал.

Һанап үтелгән фәһемле һәм ғибрәтле миҫалдарҙан күренеүенсә, Рәсәй етәкселегенә Кеше хоҡуҡтары тураһында Европа Конвенцияһы ғына түгел, хатта үҙ Конституцияһы кимәлендә фекер йөрөтөргә лә бик иртә әле. Хикмәт Төп закон ҡабул ителгәндән һуң үткән сирек быуат эсендә бер ниндәй эшлекле саралар күрелмәүендә лә түгел, ә империясыл фекерләү, империясыл тәртиптәр йәшәп килеүҙә. Кеше хоҡуҡтары тураһында һүҙ алып барыу шуға ҡабул ителмәй. Европа Советы алдындағы йөкләмәләрҙе үтәү йөҙөнән Рәсәй Конституцияһында билдәләнгән мөһим положениеларҙы тайпылышһыҙ атҡарыу ҙа күп йәһәттән илгә халыҡ-ара хоҡуҡ өлкәһендә яҡшыраҡ күренергә мөмкинлек бирер ине. Мәҫәлән дәүләт идараһына бер ниндәй мөнәсәбәте булмаған урындағы үҙидара (8-се бүлек) институты нығынып, граждандар социаль иҡтисади ихтыяждарын үҙҙәре йәшәгән ҡала һәм ауылдарҙа ҡәнәғәтләндерә алһа, көнкүреш яйлана башлар ине. Барщевский хаҡлы, беҙгә сит илдәрҙән һабаҡ алып, холоҡ-фиғелдәребеҙҙе үҙгәртеп, үҙ донъябыҙҙы үҙебеҙгә көтөргә кәрәк. Халыҡ үҙе тырышмаһа, бер генә президент та уның хоҡуҡтарын хәстәрләмәҫ.

Рәсәйҙә кеше хоҡуҡтарынан бигерәк милләттәр хоҡуғы, айырыуса БМО талап иткән үҙбилдәләнеш хоҡуғы хәл ителмәй. Ҡайһы бер ҡыҙыу баштар фекер йөрөткәнсә, халыҡтарҙы, айырыуса төркиҙәрҙе бер тирмәндә тарттырып, ниндәйҙер «россиян» милләте яһарға ынтылыу — буш эш. Милләттәрҙән «совет халҡы» яһарға тырышҡан СССР тәжрибәһе был йәһәттән дә бик ғибрәтле.

Телгә алынған хоҡуҡтарҙың барыһы ла Кеше хоҡуҡтарының дөйөм декларацияһынан һүҙмә-һүҙ тиерлек күсереп алынған РФ Конституцияһында нығытылған. Илдең Төп законы ожмах ҡына вәғәҙә итмәй, тик ни өсөн ул үтәлмәй һуң?

Кеше хоҡуҡтарын юғары төп ҡиммәт итеп таныу, сәйәси тотороҡлолоҡ һәм илдең бөтөнлөгө, дәүләттең социаль йүнәлешлелеге, властарҙың һәм урындағы үҙидараның һайланып ҡуйылыуы, бөтә халыҡтарҙың телдәренә, мәҙәниәтенә һәм традицияларына ихтирам — быларҙың барыһы ла демократтар араһында ла, коммунистарҙа ла бәхәс тыуҙырмай, әммә һүҙ менән эш берҙәмлеге юҡ.